# ҠОЯШ ҠАЙТА ӘЙЛӘНЕП

*Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында Силәбе өлкәһендә туған тел уҡытыу эштәре йәнләнде. Айырым инициативалы шәхестәр эшмәкәрлеге нигеҙендә байтаҡ эштәр башҡарылды, йүнәлештәр булдырылды. Ана шул ағым уртаһында ҡайнаған талымһыҙ һәм ҙур йөрәкле уҡытыусыларҙың береһе — Рафаил Солтан улы Мөхәмәтйәнов.*

Рәшит Солтангәрәев геройының теле менән әйткәндә, сәнғәт кешеһе һәр саҡ хуплауға мохтаж. Ә бөтә ғүмерен тәрбиә эшенә бағышлаған уҡытыусы хаҡында һөйләмәү, уның уңыштарын билдәләмәү үҙе үк битарафлыҡ, ысынбарлыҡҡа хилаф итеү булыр ине.

Бөгөнгө мәктәп алдында шундай оло бурыстар тора: белем биреү, тәрбиә эштәре алып барыу, уҡыусыларҙа характер тәрбиәләү һәм шәхестәр үҫтереү. Ләкин бөгөнгө болғауыр заманда мәктәптәрҙә лә эштәр еңелдән түгел, ул уҡытыусынан түҙемлек, сабырлыҡ һәм айыҡ аҡыл талап итә.

Рафаил Солтан улы Мөхәмәтйәновты Арғаяш районында белмәгән кеше юҡ. Айырыуса туған тел уҡытыусылары уның исемен хөрмәт менән телгә ала. Бына 40 йыл инде ул, Бәжекәй урта мәктәбендә үҙенең һайлаған төп һөнәренә тоғро ҡалып, халҡына хеҙмәт итә, туған тел уҡыта.

Сирек быуатҡа яҡын эш стажы булған педагогтың үҙенсәлекле эш тәжрибәләре лә бар, замаларҙың төрлө осорҙарына ҡағылышлы байтаҡ хәтирәләр ҙә һаҡлай күңелендә. Бай хеҙмәт һәм тормош тәжрибәһе булған уҡытыусының уртаҡлашыр фекере, өгөт-нәсихәттәре һәм кәңәштәре лә бихисап. Шуға ла йыш ҡына туған тел уҡытыусылары уның янына эшлекле һөйләшеү, кәңәшләшеү өсөн йыйыла. Белеклегә ымишара ла етә, тиҙәр.

Шуныһын да әйтеп үтәйек: туған тел уҡытыуҙы тыйған замандарҙа ла

*Р.С.Мөхәмәтйәнов дәрес алып бара*



Бәжекәй мәктәбендә туҡтауһыҙ, йәшерен рәүештә башҡорт теле уҡытылған. Саф башҡорт ауылдарын русса уҡытыуға күсереүҙе Рафаил Солтан улы балаларҙы психик яҡтан көсләү тип иҫәпләй. «Тик беҙ ҡаршы тора белмәйбеҙ шул эшкә», — тип борсола ул.

Рафаил Солтан улының биографияһы Бәжекәй мәктәбе менән ныҡ бәйләнгән. Үҙе тураһында ул ҡыҫҡаса шуны хәбәр итте: «Мин Арғаяш районының Усман ауылында тыуып үҫкәнмен. 1961 йылдан алып Бәжекәй мәктәбендә эшләйем. Ун һигеҙ йыл ошо мәктәптең директоры булдым. 1969 йылда ситтән тороп БДУ-ның башҡорт филологияһы бүлеген тамамланым. Күренекле ғалим Кирәй Мәргән ҡулдарымды ҡыҫып фәнгә китергә фатиха биргәйне. Мин ниңәлер батырсылыҡ итмәнем, күңелем менән илемә тартылдым».

Рафаил Солтан улы менән 90-сы йылдарҙан алып танышмын, уңайы тура килгәндә осрашып-һөйләшеп торабыҙ. Был юлы ла беҙҙе уртаҡ фекерҙәр, Силәбе дәүләт университетында эшләп килгән «Ҡарлуғас» әҙәби түңәрәгендә шөғөлләнгән йәш ижадсылар менән хәҙер инде ошо уҡыу йортоноң төп базаһына әүерелгән Бәжекәй урта мәктәбе, уның ижади уҡытыусылары, әҙәби ижадҡа тартылған уҡыусылары араһында тығыҙ бәйләнеш булдырыу маҡсаты осраштырҙы.

Рафаил Солтан улы асыҡ, ябай һәм ихлас кеше. Ғүмере буйы балалар менән эшләгәнгәлер инде, үҙе лә балалар кеүек эскерһеҙ, бала психологияһын яҡшы белгән, уларҙың донъяһы менән мауығып йәшәгән шәхес. Был юлы осрашып, хәл белешеп, һөйләшеп ултырғанда, оло бер табышындай итеп, костюм кеҫәһенән бер уҡыусының шиғырын килтереп сығарҙы ла уҡып та ишеттерҙе:

Ялҡын ҡатыш алам һулышымды,
Йөрәккәйем әллә ут микән?
Көтә-көтә көтөк булдым инде,
Һин ҡайтырһың микән,
юҡ микән?
Үҙ-үҙемде онотоп, йүгереп
сығам,
Киткән юлдарыңа кис, иртән.
Төндө ҡыуып килгән таң
шикелле,
Һин ҡайтырһың микән,
юҡ микән.
Һин ҡайтырһың микән,
юҡ микән...

Был шиғырҙы 11-се синыф уҡыусыһы Салауат Шәрипов яҙған. «Салауат әсәһе менән генә йәшәй. Ағаһы Илдус яңы ғына Чечен һуғышында юғалды, һәм ул үҙенең күңел тетрәнеүҙәрен ошо кескәй генә шиғыр юлдарына һалған. Шиғырҙы тәнәфестә уҡытыусыларға уҡығайным, ҡатын-ҡыҙҙар иларға ереште. Миңә ҡалһа, ошо шиғырҙа, унда сағылған бәләкәй генә тормош күренешендә оло шәхес моронлап килә», — тигән ышаныс белдерҙе уҡытыусы.

Бөгөн Бәжекәй мәктәбе Силәбе өлкәһендә туған тел уҡытыу буйынса лидер иҫәпләнә. Улар йыл һайын уҡыусылар араһында уҙғарылған туған тел бәйгеләрендә беренселекте бирмәй. Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы факультетына уҡырға барыусылар һанының артыуы — шул хеҙмәттең һөҙөмтәһе.

Быйыл алты уҡыусы төрлө уҡыу йорттарына уҡырға инде. Мин үҙем дә, Силәбе дәүләт университетының башҡорт әҙәбиәте уҡытыусыһы булараҡ, беҙҙә уҡып сыҡҡан һәм уҡып йөрөгән Ғәфүрә Нурмөхәмәтова, Нәримә Сәйфуллина, Юлиә Нурмөхәмәтова, Эльвира Шәрипова, Айгөл Истамғолова, Гөлсирә Ғафароваларҙы тик маҡтап ҡына телгә алам. Уларҙың һәр ҡайһыһы үҙҙәренең кешелек сифаттары, эшкә талапсанлыҡтары менән айырылып тора. Беренсе курс талибәһе Гөлсирә Ғафарова үҙен әҙәби ижадта ла һынап ҡарамаҡсы.

Бына шулай итеп Рафаил Солтан улы сәскән орлоҡтарының бөгөн емешен күрә. Тәрбиә эше бит ул ҡояш шикелле, кире әйләнеп ҡайта. Шуға һис икеләнмәйенсә Рафаил Солтан улы: «Уҡыусыларым-

дан уңдым!» — ти. Ә минеңсә, беҙ унан уңдыҡ, уҡыусылар уҡытыусыһынан уңды. Бөгөн Бәжекәй мәктәбендәге 34 уҡытыусының 5-6-һы ғына ситтән килеп уҡыта, ә ҡалғандары барыһы ла абруйлы уҡытыусы Р.Мөхәмәтйәновтың үҙ уҡыусылары. Балаларҙы етәкләп мәктәп тупһаһына баҫтыра ла, тормош юлына сығарғанда ла үҙ ҡанаттары аҫтында ҡурсалай, өйрәтә. Үҙенең элекке уҡытыусыһы һәм хәҙерге коллегаһы хаҡында Бәжекәй мәктәбенең уҡытыу бүлеге мөдире Ғәффә Ғәҙелша ҡыҙы Мостафина былай тине: «Рафаил Солтан улының 40 йылдан ашыу педагогик стажды һыйҙырған ифрат ҙур багажы бар. Уның тырышлығы менән ауыр саҡтарҙа ла башҡорт теле уҡытылды, тимәк, беҙ үҙебеҙҙе лә бар тойҙоҡ. Иң һоҡландырғаны — уның кешеләр менән аралаша белеүе, һәр саҡ башҡалар менән аҡыллы кәңәше, тейешле дәрес материалдары менән бүлешеүе. Бөтмөр кеше. Бер ҡасан да эштән арымай. Саҡырһалар, шунда уҡ барып етә. Арғаяш халыҡ театрында ла уйнай. Район мәғариф идаралығында ла методистарға мөмкин тиклем ярҙам итә. Уның тураһында бер ҡасан да яман һүҙ ишетелмәй. Уның һәләте, эшкә дәрте һоҡландыра.

Бөгөн Бәжекәй урта мәктәбе Арғаяш районында туған тел уҡытыу буйынса терәк мәктәптәрҙең береһе. Унда барһаң, тыштан уҡ һине башҡортса яҙыуҙар ҡаршы ала, коридор буйлап атлауы ла күңелле. Ә башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеты ысын мәғәнәһендә уҡытыусының оҫтаханаһына әүерелгән. Ундағы ябай ғына бер күренешкә иғтибар иткәйнем: синыф таҡтаһынан саҡ ҡына үрҙәрәк «Был һүҙҙәрҙе онотма!» тигән таблица эленгән. Унда көнкүрештә ҡулланыла торған «Һаумыһығыҙ!», «Рөхсәт итегеҙ?», «Мөмкинме?», «Хуш булығыҙ!» кеүек ябай һүҙҙәр яҙылған. Ә күпме тәрбиәүи мәғәнә бар унда. Туған тел уҡытыуҙың башы шул ябай һүҙҙәрҙән башлана. Рафаил Солтан улы, педагог булараҡ, һәр бер һүҙҙең үҙ үлсәмен һәм тылсым көсөн белә. Халыҡта: «Кешегә бер йылы һүҙең, бер тәрилкә йылы ашың да етә», тиҙәр. Ә Рафаил Солтан улы ғүмерендә йылы һүҙҙәр генә түгел, ә күпме ҡанатлы һүҙҙәр әйткән икән?! Бай тормош тәжрибәһе булған мәҙәниәтле кеше бер ҡасан да һүҙҙе тәләф итмәҫ. Беҙҙең геройыбыҙ ҙа ана шундайҙарҙан.

Мәсьәләнең тағы бер яғы бар: насар уҡыусылар хаҡында ҡыҙыҡһындым. Был һорауыма ул: «Насар уҡыусылар юҡ!» тип яуап бирҙе. Башланғыс кластарҙан килгән балаларҙы ҡабул иткәс тә тәжрибәле уҡытыусы уйлап ҡына өс һөйләм яҙҙырыу эшенән башлай. Уныңса иң мөһиме: уҡыусылар уйларға өйрәнһендәр, туған телдәрендә рәхәтләнеп һөйләшһендәр һәм матур аралашһындар.

Рафаил Солтан улы Мөхәмәтйәновтың хеҙмәтен баһаланылар. Байтаҡ грамоталар менән бүләкләнгән. 1997 йылда уға хаҡлы рәүештә «Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы» тигән исем бирелде. Титулдар бар, ләкин һине уратып алған кешеләрҙең ҡәҙере бар нәмәнән дә ҡиммәтерәктер ул. Ә Рафаил Солтан улы был йәһәттән бәхетле, сөнки уны уҡыусылары төрлө байрамдар уңайы менән онотмай ҡотлап, ҡәҙерләп торалар.

Йәнә шуныһы ла ҡыуаныслы: бөгөн хаҡлы ялда булып та эшләп йөрөгән атаһын алмаштырырға улы Таһир ҡайтҡан. Ул да атаһы һуҙған юл — туған тел уҡытыу эшендә. Тимәк, йәнле традициялар дауам итә. Быуындар бәйләнеше өҙөлмәгәнгә һөйөнөргә генә ҡала.

*ҠАМСА МОРТАЗИН,*
*«Ватандаш»тың Силәбеләге*
*махсус хәбәрсеһе.*